*Кәрҙәштәрем, кешелектең сәңгелдәге бында – Бөрйәндә,*
*Урал илдән тарих башлана.*



# Урал

*Тәбиғәттең генә түгел*
*Бында кеше мираҫы.*
*Үҙ аңыбыҙ йәншишмәһе*
*Рухыбыҙ Аҡбуҙаты.*
*Т. Карамышева*

**Хөрмәтле ҡунаҡтар!** «Урал батыр» эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәр!

Беҙ тарихи ҡомартҡылар иле, рухыбыҙ сәңгелдәге, эпостар төйәге, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады гәүһәрҙәре төйәге булған гүзәл Бөрйән ерендә ихлас, сәсән телле уҡыусыларҙы күреүебеҙгә шатбыҙ!

“Урал батыр” йәш сәсәндәр бәйгеһендә ҡатнашыусы балаларҙың зиһененә, хәтеренә, кеше аҡылының ҡөҙрәтенә һоҡланмау мөмкин түгел. Ғөмүмән, рухи байлығыбыҙ булған «Урал батыр» эпосында йәш быуынды тәрбиәләү өлгәләре асыҡ сағыла.

Бөгөнгө көндә, енәйәтселек, алкоголизм, наркомания, эшһеҙлек күбәйгән заманда балаға аҡты ҡаранан айыра белеү, яҡшылыҡ менән яманлыҡ төшөнсәләрен өйрәтеү - беҙҙең төп бурысыбыҙ. Башҡорттоң тәрбиә ҡанундары «Урал батыр»ҙа тупланған да инде. Яҡшылыҡ ҡылыуға ынтылған һәр кешегә юлдар асыҡ була, сөнки күңелендә изгелек орлоҡтары йөрөткән йән эйәһе һәр ваҡыт маҡсатына ынтылыусан, ныҡышмал, аҡыллы була. Беҙ ҙә «Урал батыр» васыятын үтәйек: Ер-әсәбеҙҙе юҡҡа сығарыуҙан, уны ҡоротоусыларҙан һаҡлайыҡ, яҡшылыҡҡа ынтылайыҡ, таҙа намыҫлы булып йәшәйек.

Был байрам берҙәмлек, дуҫлыҡ, татыулыҡ, еңеүҙәр алып килһен һәм һеҙҙең күңелегеҙҙә мәңге онотолмаҫ байрам булып һаҡланһын. Барығыҙға ла күтәренке кәйеф, балҡыштар, ижади уңыштар, күңелдәрегеҙҙәге еңеү осҡононоң ялҡын булып дөрләп яныуын теләйем!

Район мәғариф бүлеге етәксеһе Р.Б.Шәрипов



Төп идеяһы тәбиғәт стихияһы көстәре алдында кешенең еңелмәҫ бөйөк батырлығын данлау, тәбиғәт менән кешелектең мәңгелеген раҫлауға ҡайтып ҡалған «Урал батыр» тураһында төрлө мәғлүмәттәр:

- эпосты беренсе тапҡыр 1975 йылда Ғәзим Шафиҡов рус теленә тәржемә иткән;
- эпос 4576 теҙмә һәм 19 сәсмә юлдарҙан тора;
- эпоста кешелек тормошоноң нигеҙе булып яңғыраған олө тәғлимәт - яҡшылыҡ;
- эпоста өс донъя һүрәтләнеше сағыла: йыһан, ер, ер (һыу) аҫты;
- эпос өс өлөшкә бүленә һәм өс быуын кешеләре тормошо сағыла;
- өс быуын: Йәнбирҙе ҡарт һәм Йәнбикә ҡарсыҡ, уларҙың улдары Шүлгән һәм Урал, уларҙың вариҫтары: Һаҡмар һәм Яйыҡ, Иҙел, Нөгөш;
- әҫәрҙәге фантастика:
  * күктә тыуып күктә үҫкән Аҡбуҙат;
  * Самрау батша үҙе - еңше, ҡатындары - күк есемдәре (Ҡояш, Ай);
  * Ҡояш ҡыҙы Һомай, Ай ҡыҙы Айһылыу ҡош та, кеше лә була алалар;
  * Зәрҡүм йыланға ла, кешегә лә, кошолгә лә әйләнә;
  * дейеү һарайҙарын һаҡлаусы йыландар, аждаһалар - ярым кеше, ярым фантастик заттар;
  * яуға ҡаршы ут булып, теләгәндә һыу булып, елдауылдар ҡуптарыр хикмәтле таяҡ;
- 2014 йылда «Пегас» йондоҙлоғоноң бер йондоҙона «Урал батыр» исеме бирелгән.



Филология фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте, фольклор һәм мәҙәниәт кафедраһы профессоры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, БР һәм РФ Яҙыусылар союзы ағзаһы, абруйлы яҡташыбыҙ Зәйтүнә Яхъя ҡыҙы Шәрипова йәш сәсәндәргә һәм уларҙың остаздарына, Бөрйән халҡына еткерергә теләгән уй-фекерҙәре менән уртаҡлашты.

“Урал батыр” эпосы хаҡында әйтер һүҙ

Донъя шулай яралған: ер йөҙөндәге һәр күренештең үҙ йәшәү рәүеше һәм үҙенә тәғәйен ғүмере бар. Мәңгелек тойолған тауҙар ҙа емерелә, ажғырып аҡҡан киң дарьялар ҙа һайығып юҡҡа сыға, ә инде кеше ҡулдары төҙөгән ҡаралтылар тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Шулар араһында сағыштырғыһыҙ оҙаҡ йәшәй торғаны, һис шикһеҙ, Һүҙ. Уны һаҡлау өсөн йоҙаҡлы диуарҙар ҙа, тапшырыу өсөн вагон-вагон почта ташығыстар ҙа кәрәкмәй, тик аңға һеңдереү, хәтерҙә тотоу, һөйләү - яҙыу ғына етә. Ошо ябай ғына хәҡиҡәтте аңлауҙы мин тел тойғоһо тип атар инем. Туған телгә һөйөү тәрбиәләү - ул, асылда, тел тойғоһо тәрбиәләү тиергә була. Көндәлек һөйләшеүебеҙҙәге һәр һүҙ боронғо ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған, әллә күпме тарихҡа бәйле икәнлеген аңлағанда ғына тамырлана күңелдә ул мөҡәддәс тойғо.

Мин үҙем бәләкәйҙән уҡыуға әүәҫ булдым, шуға мәктәптә лә, педучилищела ла тел мәсьәләһе булманы. Университетты “ҡыҙыл ” дипломға тамамлаһам да, ысын мәғәнәһендә филолог булып китеүем Мәскәүҙә Ленин исемендәге китапханала булды, тип әйтер инем. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй башлағас, “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” өсөн боронғо төрки ҡомартҡылар хаҡындағы бүлекте яҙырға республикала шул юҫыҡтағы сығанаҡтарҙың ул ваҡытта булмағанлыҡтан, материал эҙләп командировкаға килгәйнем. Мәхмүт Ҡашғариҙың “Диуане лөғәт әт-төрк” һүҙлегенең ғәрәптән үзбәксә тәржемәһен алып, “баҙал” һүҙенә барып юлыҡҡас, шаңҡып ултырыу хәтерҙә. 1072 йылда төҙөлгән һүҙлектә ул “һырт” мәғәнәһендә теркәлгән. Мәҡсүт ауылына барғанда Уҙараш һәм Ыуашаш тигән йылғасыҡтарҙы үткәндә, боронғо венгрса “ҡошло һәм тимерле” тигәнде иҫкә алһаҡ, Бөрйән төбәгенең тәбиғәт ҡурсаулығы ғына түгел, ә милли тел хазинаһы һаҡланыусы ер булыуына инанаһың.

Был боронғолоҡ айырыуса эпик ҡомартҡылар менән дә раҫлана. Ошо йәһәттән Мөхтәр ағай Сәғитов иҫкә төшә. Боронғо башҡорт ҡобайырҙарының, айырыуса “Урал батыр” тексының баҫылып сығыуында уның туранан-тура ҡатнашлығы бар. Барыбыҙға мәғлүм: эпостың тексын Мөхәмәтша Буранғолов Баймаҡ районы Иҙрис ауылында Ғәбит сәсәндән 1910 йылда уҡ яҙып алһа ла, 1938 йылда төрмәнән һуң Тарих, тел институтында эшләгәндә латин графикаһында машинканан үткәртһә лә, үҙе иҫән саҡта донъя күрмәй, “Башҡорт халыҡ ижады” серияһында барлы 1972 йылда баҫыла. Томдың тексы, башҡа барлыҡ хеҙмәттәр кеүек үк, нәшриәткә тәҡдим итерҙән элек институттың ғилми советында раҫлана, шул ултырышта бер һүҙ өсөн оло бәхәс ҡуба. Күптәр, тексты эшкәртеүсе Мөхтәр ағайға “томбойоҡтар япрайып, тик ағастай сәскә атҡан” тигән юлдарҙа “тик” һүҙен хата тип төҙәтергә ҡуша. “Алып ташламаҫ өсөн әллә күпме белешмә-һүҙлектәр аҡтарып, уның тропикта үҫә торған ағас исеме икәнлеген асыҡлап, саҡ һаҡлап ҡалдым “тип һөйләгәне хәтерҙә.

Ғөмүмән, “Урал батыр” эпосы–лексика күҙлегенән бик күп ҡатламдарҙан торған, идея-эстетик йәһәттән ҡатмарлы ҡомартҡы. Уға ҡағылышлы ҡайһы бер тикшереүҙәрҙә ебәрелгән, минең ҡарамаҡҡа, өс хатаны атап үтке килә: 1) тексты уйҙырма, әкиәт итеп ҡарау; 2) тексты, киреһенсә, тарихи документ рәүешендә башҡорт халҡының этнографик мәғлүмәттәре сифатында ҡарау; 3) тексты үҙгәртеү-үҙгәртмәү мәсьәләһе. Һуңғыһына бер аҙ туҡталғы килә. Халыҡ һүҙ сәнғәте өлгөләре, телдән-телгә күсеү, быуындан-быуынға тапшырылыу процесында билдәле бер сиктәр эсендә үҙгәрергә мөмкин. “Урал батыр” тексы ла, бәхәсһеҙ, оҙлөкһөҙ дауам иткән телдән тапшырыуҙар эстафетаһында яңыртыуҙарға дусар булғандыр – был тәбиғи. Әммә фольклор үрнәктәре ташҡа баҫылып, меңәрләгән тираж менән таратылғандан һуң, ул яҙма әҙәби әҫәр статусын ала. Ҡайһылыр ижадсы, әлбиттә үҙенсә үҙгәртә ала, тик уның тексы “Урал батырға” ремикс, шәхси версия иҫәпләнәсәк. “Урал батыр” эпосы тирәһендә ижад ителгән байтаҡ бөтән ҡомартҡылар барлығын иҫәпкә алһаң, уның отош цикл рәүешендә өйрәнелергә тейешлеге лә күҙгә салына.

Башҡорт һүҙ сәнғәтенең камил һәм үлемһеҙ ҡаҙаныштарының береһе - "Урал батыр" эпосы - яҙма әҙәбиәтте байытып, даими тулыландырып торған мәңгелек шишмә лә ул. "Урал батыр" эпосындағы барлыҡ геройҙар ҙа, йә изгелек, йә яуызлыҡ символдары сифатында әҫәрҙән әҫәргә күсеп йөрөй. Бөгөнгө шиғриәттә (Т. Исҡәндәриәнең "Һомайғошом" шиғыры, М.Ямалетдиновтың китабы "Һомайҡош", Ф.Туғыҙбаеваныҡы - "Минең ҡошом -Һомай") Һомай, Һомайғош образы киң таралған. Ә аҡ ҡанатлы Аҡбуҙат образы кемдәрҙе генә илһамландырмаған икән? Был образдарҙы бөгөнгө шиғриәт үҙенсәлекле, киң мәғәнәле, сағыу символдар дәрәжәһенә күтәрә. Йәншишмә- тыуған ер, Һомай - ҡот, бәхет, ырыҫ билгеһе, Аҡбуҙат - хыял, илһам, дәрт, көс символы булып нығынған.

Район өсөн бындай байрамдың уҙғарылыуы айырыуса әһәмиәтле. Туған телебеҙҙең байлығын үҙләштереү – тыуған ерҙең тарихын белеү ул; шул саҡта ғына үҙең йәшәгән ергә хөрмәт уяна, һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләнә. Бөрйәндә туристәр менән тултырып, туризмды үҫтерергә йыйынғанда, был сифаттар бик тә урынлы. Үҙең ярапмаһаң, үҙең һаҡламаһаң, сит кешеләр ҡәҙерләй буламы матур тәбиғәтте!

Зәйтүнә Шәрипова, БДУ профессоры




*Халыҡ ижадының аҫыл ҡомартҡыһын*
*Һин халыҡҡа ҡабат ҡайтарҙың...*

*“Урал батыр” эпосын халыҡҡа еткереүселәр тураһында тарихи мәғлүмәттәр.*

*1910 йылдың йәмле йәй айҙарында, "Хөсәйениә"мәҙрәсәһендә уҡып йөрөгән 22 йәшлек шәкерт Мөхәммәтша Буранғолов, халыҡтан ауыҙ-тел ижадын йыйыу, уларҙы яҙып алыу маҡсаты менән, Бөрйәнырыуы яҡтарына килә. Ул Түбәнге Иҙрис ауылында йәшәүсе Ғәбит сәсән Арғынбаев менән осрашып унан бик күп ҡобайыр һәм бәйеттәр яҙып ала. Ғәбит сәсән Хәмит сәсәндән 5 йәшкә оло була. Шулай ҙа, унан Мөхәмәтша Буранғолов "Урал батыр"эпосын һөйләүен һорағас:*

*- Хәмит ҡайнағамдан үтеп, халҡыбыҙҙың изге ҡомартҡыһын үҙем генә һөйләй алмайым, - тип яуап бирә. Сөнки Ғәбиттең ҡатыны Хәмит сәсәндең бер туған ҡарындашы була. Бер нисә көндән Ғәбит сәсән атын егеп, Мөхәмәтшаны ултыртып 2-се Этҡол ауылына юлланалар. Хәмит сәсән Мөхәмәтшаның изге ниәтен белгәс, алыҫ сәфәрҙән яңы ғына ҡайтып тороуына ҡарамаҫтан, ҡорбан салырға ҡарар итә. Абдулов тигән ауылдашынан ҡорбанлыҡ һарыҡ һатып ала.*

*Ауылдан алыҫ түгел Бишҡайын һаҙлығы буйына сығып, сәсәндәр ҡорбан салып ҡаҙан аҫалар. Изге доғалар уҡып, ҡорбан ашынан ауыҙ иткәс, улар М.Буранғоловҡа халыҡ ҡомартҡыһы "Урал батыр"ҡобайырын алмашлап яттан һөйләргә тотоналар. Сәсәндәр ҡобайырҙы сәғәттәр буйы бер туҡтамай яттан һөйләйҙәр. Шулай итеп, быуаттар буйы телдән-телгә күсеп килгән башҡорт халҡының изге ҡомартҡыһы "Урал батыр", ошо ерҙә тәүге тапҡыр ғәрәп хәрефтәре менән аҡ ҡағыҙға яҙыла.*

*Был ваҡытта Бишҡайын һаҙлығынан алыҫ түгел, Байым талы һәм Сарҙаҡ күле буйында, ауыл халҡы Әхмәров Әхмәткәрим байға бесән сабып ятҡан була. Улар байҙың рөхсәте менән Мөхәммәтша Буранғоловты күрергә киләләр. Бишҡайын һаҙлығы буйында оло йыйын барлыҡҡа килә. М. Буранғолов халыҡ менән иркенләп һөйләшә, аралаша, һуңынан был урынға иҫтәлек итеп ике метр бейеклегендәге таш ултыртыла.*

*Йылдар үтеү менән Бишҡайын һаҙлығына ултыртылған таш ҡолай. 2006 йылда, Хәмит сәсәндең ейәнсәре Сәлимә апай һәм ошо ауылдың тарихсыһы Моразым Ишбулды улы Хәлиловтарҙың инициативаһы менән, таш Сибай ҡалаһында стелла итеп эшкәртелеп, шул уҡ урынға яңынан ҡуйыла. Ошо урында сәсәндең нәҫеле йыйылып шәжәрә байрамы үткәрәләр. Стеланы аҫыу тантанаһы ойошторола һәм "Урал батыр" эпосының ҡағыҙға төшөүенә 96 йыл тулыуҙы билдәләйҙәр.*

*Һүҙ сәнғәтенең иң боронғо үрнәге булған "Урал батыр"хәҙер төрөк, инглиз, француз, рус, чех, сыуаш һәм башҡа телдәргә тәржемә ителгән.*

*(Тарихи мәғлүмәттәр 2013 йылда Баймаҡ ерендә республика йәш сәсәндәр конкурсы үткәрелеү айҡанлы әҙерләнгән “Телдән дә төшмәҫ яҡшылыҡ” йыйынтығынан алынды).*

**Телдә генә ҡалмаһын Урал батырға һәйкәл ҡуйыу башланғысы**

Үҙәк Совет власы менән Башҡорт хөкүмәте араһында Башҡорт Совет автономияһы тураһында килешеүгә 100 йыл тулыуҙы һәм 2020 йылда Башҡортостанда Бөтә донъя фольклориадаһы үткәреләсәген күҙ уңында тотоп, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Урал батырға һәйкәл ҡуйыу идеяһы менән сыҡты. Шул уңайҙан, “Башҡортостан” дәүләт телерадиокомпанияһының медиа-үҙәгендә матбуғат конференцияһы үтте. Унда Ҡоролтай ҡарамағында ошо маҡсатта ойошторолған, составына телселәр, тарихсылар, философтар, башҡа белгестәр ингән эш төркөмө ағзалары ҡатнашты.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, профессор, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Әмир Ишемғолов белдереүенсә, был бик яуаплы эш һәм уны өс этапта тормошҡа ашырыу планлаштырыла.

Беренсе этап –«Урал батыр» эпосы менән ҡыҙыҡһыныусы ғалимдарҙы бергә йыйып, улар менән әҫәрҙе төрлө күҙлектән тикшереп һәм мөмкин булған барлыҡ мөһим мәлдәрҙе асыҡлап, һәйкәлдең нисек булырға тейешлеге тураһында уртаҡ фекергә килеү.

Икенсе этапта архитекторҙар менән эш алып барыласаҡ. Йәғни эш төркөмө уртаҡ фекергә килгән образ Уралды һынландырырға теләге булған барлыҡ архитекторҙарға, скульпторҙарға ҡулланма булып торасаҡ.

Өсөнсө этап – комплексты йәки ансамблде эшләү өсөн финанс мәсьәләһен хәл итеү. Тотош илде көрсөк ялмап алғанда, әлбиттә, был мөһим мәсьәләләрҙең береһе. Шул уҡ ваҡытта, тарих ҡабатлана, тигәндәй, заманында башҡорттар Каруанһарай мәсетен төҙөүгә бер төптән ҡубып аҡса йыйғанлығын да хәтергә төшөрҙө матбуғат конференцияһында ҡатнашыусылар.

Урал батыр образы аша дөйөм башҡорт милләтенә ҡуйыласаҡ һәйкәл – ул Салауат Юлаев һәйкәле кеүек рухландыра, ҡанатландыра, илһамландыра, дәртләндерә, көс өҫтәй торған урын, батырлыҡ һәм изгелек, кешелеклелек һәм намыҫ символы булырға тейеш.

(интернет сайттарынан алынды)

*Әҙиәләр иле*

*Башҡортостан – әҙиәләр иле,*
*Аҫыл заттар иле, нур иле,*
*Мәңгелектән килеп, мәңгелеккә*
*Олғашыусы моңло йыр иле.*

*Был ерҙәргә тәүләп аяҡ баҫҡан*
*Йәнбирҙе лә менән Йәнбикә.*
*Ғүмер иткән улар, донъя көткән*
*Һунарҙарға йөрөп кейеккә.*

*Заманалар башланалыр бында*
*Тәүтормоштан, алыҫ тәү мәлдән,*
*Йәнбирҙе лә менән Йәнбикәнән,*
*Урал батыр менән Шүлгәндән.*

*Ошо ерҙе изге Урал батыр*
*Беҙгә төйәк итеп ҡалдырған,*
*Йәншишмәнең тере һыуын, бөркөп,*
*Ырыҫ ямғырҙары яуҙырған.*

*Бында тыуған беҙҙең тәү динебеҙ,*
*Рухыбыҙға терәк – Тәңребеҙ.*
*Бында тыуған беҙҙең тәү телебеҙ,*
*Телебеҙҙә – яҡты көнөбөҙ.*
*(шиғырҙан өҙөк)*

***Рәшит Шәкүр***



Салауат Ғәләмовтың «Урал батыр эпосы» тураһындағы асыштары

Башҡорт халҡының аҫыл гәүһәрҙәренең береһе булған «Урал батыр» эпосы үҙендә бихисап серҙәр һаҡлай. Мәҫәлән, «Урал батыр»ҙы төрлө йүнәлештә тикшергән тарихсы ғалим, лингвист, донъя фәнендә башҡорт фәлсәфәһенә нигеҙ һалыусы Салауат Ғәләмов эпостағы белем-мәғлүмәттәрҙе математиктар һәм астрономдар ҙа үҙ эшендә ҡуллана ала, тип раҫлай. Ул «Урал батыр» эпосын Арҡайым архитектураһына яраштырып һәм сармат алтын боландары тураһындағы мәғлүмәттәрҙән сығып, бронза дәүерендәге башҡорт йондоҙнамәһе циклын тулыһынса тергеҙҙе һәм боронғо башҡорттар астрономияһының һинд-герман фәнен булдырыу тарихындағы мөһим әһәмиәтен бар донъяға танытты. Ғалимдың был асышы, ғөмүмән, «Урал батыр» эпосы үҙе Нобель премияһына лайыҡлы.

«Урал батыр»ҙың йөкмәткеһенән астрономия күҙлегенән ҡарағанда, ул боронғо календарҙы көүҙәләндерә икәне ап-асыҡ төҫмөрләнә, — тип һөйләй Салауат Ғәләмов. — Унда ерҙең Төньяҡ ярымшарының йондоҙнамә циклын тәшкил иткән һәм төнөн күктә күҙәтеү мөмкин булған барлыҡ йондоҙлоҡтар көҙгөләге кеүек сағыла. Улар бер йыл эсендә күктә нисек хәрәкәт итә, мифта шул эҙмә-эҙлелектә бирелә. Был боронғо башҡорт астрономдарының күктәге йондоҙҙарҙы яҡшы белеүен һәм йондоҙнамә календары буйынса йәшәүен дә раҫлай. Боронғо башҡорттар үҙҙәренең «Урал батыр» календарына эйә булып, төнгө күкте күҙәтеп, Арҡайым цивилизацияһын барлыҡҡа килтергән. Бындай милли календарь тағы ла ер эшкәртеүсе ҡайһы бер мәҙәни халыҡтарҙа — гректар, индустар, ирандар, римдар, ҡытайҙар, японлар һәм Америка ҡитғаһында йәшәүсе майя индеецтарында ғына бар һәм улар ҙа үҙҙәренең ошо календары буйынса сәсеү өсөн уңайлы ваҡытты билдәләгән, һауа торошонон үҙгәреүен белгән.

(интернет селтәренән алынды)

**Районлар тураһында**

Башланғыс осоронда бер нисә район командалары ҡатнашлығында ғына үткәрелһә, бөгөнгө күркәм сарала өс тиҫтә команданың ҡатнашыуы йылдан-йылдан-йыл бәйгенең бәҫе, мәртәбәһе артыуы, үткәреү кимәле камиллаша барыуын дәлилләй.












Махсус номерҙағы материалдарҙы:
Н.Т. Шәрипова,
Ә.И. Ибраһимова,
А. Ә. Хисаметдинова,
әҙерләне.